**Тема: Ҡоштар донъяһы. Хәҙерге заман ҡылымдарының юҡлыҡ формаһы.**

Маҡсаттар: 1 (өйрәтеүсе): ”Ҡыш миҙгеле”, “ҡоштар” темаһы буйынса алған белемдәрен тәрәнәйтеү һүҙлек запасын байытыу һәм уларҙы телмәҙә ҡулланырға өйрәтеү;
Ҡылым темаһын ҡабатлау, юҡлыҡ формаһын үҙләштереү.
2 (тәрбиәләүсе): Ҡоштарға һаҡсыл ҡараш булдырыу; үз-ара итәғәтле аралашыу формаларын нығытыу, телгә иғтибарлылыҡ, ихтирам тәрбиәләү.
3(үҫтереүсе): фекерләү ҡеүәһен, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.
Йыһазландырыу: проектор, компьютер, карточкалар, һүҙлектәр
Үҙләштереү өсөн һүҙҙәр: турғай, күгәрсен, сыйырсыҡ,тумыртҡа,һайыҫҡан һ.б.

**Дәрес барышы**

I. Ойоштороу мәле.

-Дәресте башлар алдынан әйҙәгеҙ бер- беребеҙгә ҡарап йылмайып алайыҡ, яҡшы, уңышлы дәрес теләп башлап ебәрәйек.
-Бөгөнгө числоны, аҙна көнөн иҫкә төшөрәйек.
-Ә һауа торошо ниндәй? (уҡыусылар яуап бирә)
-Ниндәй йыл миҙгеле? (яуаптар)

II. Фонетик күнегеү. Өй эшен тикшереү.
-Һеҙҙең алда текст, үҙ аллы уҡып сығығыҙ.
-Танышмы?Эйе, был һеҙҙең өй эшегеҙ ине. Әйҙәгеҙ тикшерәйек. Тик беренсе абзацты ғына уҡыйыҡ.

*Ҡыш-йылдың матур, ләкин ауыр осоро ул. Сатлама һыуыҡтар, көслө ҡар бурандары, тәрән ҡар урманда, яланда йәшәгән йәнлектәргә, ҡоштарға ауыр һынауҙар алып килә...*

-Нимә тураһында һүҙ бара?...
-Әйҙәгеҙ ошо картинаны күҙ алдына килтерәйек
- ҡар яуа, аяҡ аҫтында ҡар шығырлай, буран тауышы, ҡоштар өшөй, аҙыҡ эҙләй... (таҡтала һүрәттәр)






-Уҡыусылар һүрәттә нимә күрәһегеҙ?
-Әйҙәгеҙ бергәләшеп ҡабатлайыҡ: (ҡар яуа, көслө ел, аяҡ аҫтында ҡар шығырлай, балалар тәҙрә артында нимә күрә? Ҡоштар, улар өшөй)
-Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
-Дөрөҫ, **коштар тураһында.**(Таҡтаға, ҡышҡы ағасҡа ҡоштар ҡунған, һүрәтен ҡуйыу)
-Дәрес ваҡытында тулы, дөрөҫ яуап биреүселәргә мин ҡошсоҡтар бирәсәкмен.

III. Телмәр үҫтереү теманы ҡабатлау.

-Был ҡоштар беҙҙең дәрескә ҙур хаттар алып килгән.
(Төрлө ҡоштар төшөрөлгән карточкалар ята)

-Бирелгән ҡоштарҙы төркөмләп һалырға кәрәк, әйҙәгеҙ төркөмләп эшләйек, кем тиҙерәк...

| йылы яҡҡа осоусы ҡоштар | ҡышлаусы ҡоштар | йорт ҡоштары |
|---|---|---|
| грач (ҡара ҡарға) | воробей(турғай) | гусь(ҡаҙ) |
| журавль(торна) | голубь(күгәрсен) | курица(тауыҡ) |
| лебедь(аҡҡош) | ворона(ҡарға) | индюк(күркә) |
| скворец(сыйырсыҡ) | синица(ҡарабаш турғай) | утка(үрҙәк) |
| соловей(һандуғас) | дятел(тумыртҡа) | цыпленок(себеш) |

-Афарин, ә ни өсөн ошо төркөмдәр барлыҡҡа килде?
1- ҡышлаусы ҡоштар(зимующие птицы)
2-йылы яҡҡа осоусы ҡоштар(птицы улетающие в теплые края)
3-йорт ҡоштары(домашние птицы)

-Ҡоштарҙың исемдәрен тағы ҡабатлап,нығытайыҡ . Хор менән ҡабатлатыу.
-Ә был ҡоштар нимә менән айырыла? Уларға ярҙам кәрәкме? (Тағараҡ күрһәтеү)

## IV. Өй эшен биреү.

-Һүҙлек дәфтәренә ҡош исемдәрен йәбештереп ҡуйығыҙ һәм киләһе дәрескә ятлағыҙ, ял көндәрендә тағараҡ эшләп йә өй, йә мәктәп алдында үҫеп ултырған ағастарға элегеҙ.

Физминутка үткәреү. Ял итеп алайыҡ.
Оса,оса-ҡош оса
Оса,оса-сыйырсыҡ оса
Оса,оса-дәфтәр оса.

Һеҙҙең алда һүҙҙәр, ул һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөргә кәрәк.

1.Сыйырсыҡтар, ҡара ҡарғалар йылы яҡҡа осалар.Күгәрсендәр йылы яҡҡа осмайҙар.
2.Аҡҡоштар ҡыш көнө беҙҙә ҡалмайҙар. Ҡарғалар ҡыш көнө беҙҙә ҡалалар.
3.Тумыртҡа һайрамай.Һандуғас матур һайрай.

-Дөрөҫ, әйҙәгеҙ ике һөйләмде эш дәфтәрҙәренә теркәп ҡуяйыҡ.
Эш дәфтәрҙәрендә число, класс эше, теманы һәм ике һөйләмде яҙып ҡуяйыҡ.

## V. грамматик теманы үҙләштереү

Ике һөйләмде сағыштырып, ҡылымдарҙың барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһын аңлатыу.
*Сыйырсыҡтар, ҡара ҡарғалар йылы яҡҡа осалар.Күгәрсендәр йылы яҡҡа осмайҙар.*

| Хәҙерге заман ҡылымдарының юҡлыҡ формаһы<br>отрицательная форма глаголов наст.времени | | |
|---|---|---|
| Берлек – единственное число | | |
| Лицо | Если слово оканчивается на **твёрдую гласную** | Если слово оканчивается на **мягкую гласную** |
| **I Мин (я)** | **-майым** | **-мәйем** |
| **II һин (ты)** | **-майһың** | **-мәйһең** |
| **III ул (он,она)** | **-май** | **-мәй** |
| Күплек – множественное число | | |
| **I беҙ (мы)** | **-майбыҙ** | **-мәйбеҙ** |
| **II һеҙ (вы)** | **-майһығыҙ** | **-мәйһегеҙ** |
| **III улар(они)** | **-май(ҙар)** | **-мәй(ҙәр)** |

## VI.грамматик теманы нығытыу.

-Һеҙҙең алда текст. Уҡып, тәржемә итергә кәрәк. Ҡылымдарҙы табып, уларҙы юҡлыҡ формаһында зат һәм һан буйынса үҙгәртеп яҙырға кәрәк.

Ҡоштар файҙалы. Улар ағастарға, емеш-еләккә, йәшелсәгә зарар килтерә торған бөжәктәрҙе ашай. Шуға күрә беҙ ҡоштарға ярҙам итәбеҙ, тағараҡтар эшләйбеҙ. Уларға ем һалабыҙ. Ҡоштар беҙҙең дуҫтарыбыҙ.

---

**Файҙалы-полезный**
**емеш-еләк-ягоды**
**йәшелсә-овощи**
**зарар килтерә торған-приносящий вред**
**шуға күрә-поэтому**
**ярҙам итәбеҙ-помогаем**
**тағараҡ-кормушки**
**ем-корм**

Өлгө: Мин ҡош һайрауын тыңларға яратам.

| | берлектә (ед.ч.) | күплектә (мн.ч.) |
|---|---|---|
| I | яратмайым (я не люблю) | яратмайбыҙ (мы не любим) |
| II | яратмайһың (ты не любишь) | яратмайһығыҙ (вы не любите) |
| III | яратмайбыҙ (он,она не любит) | яратмайҙар (они не любят) |

Ваҡыт ҡалһа, дәреслек менән эшләү 58-се бит,3-сө күнегеү. Уҡып, тәржемә итеү.

## VII.Дәресте йомғаҡлау.

-Уҡыусылар, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләштек?
-Ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ?
-Һорауҙарығыҙ бармы?
-Тәҡдимдәрегеҙ?
-Улай булһа үҙебеҙҙе,бер беребеҙҙе маҡтап ҡул сабып алайыҡ.

-Уҡыусылар, һеҙгә дәрес ысынлап та оҡшаһа, алдарығыҙҙа ятҡан ҡоштарҙы беҙҙең ағас янына йәбештерегеҙ, ә оҡшамаһа минең өҫтәл өҫтөнә һалып китегеҙ.
-Һау булығыҙ.

**Дәресте анализлау.**

Федераль дәүләт белем биреү стандартында уҡыусыларҙа компетентлыҡ формалаштырыу, белем алыу, уны практикала ҡулланырға һәм толерантлыҡҡа өйрәтеүсе төп бурыстарҙың береһе тип ҡарала. Яңы стандарт шарттарындағы төп тәрбиәүи бурыстарҙы күҙ уңында тотоп, мин бөгөн **«Ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһы», «Ҡоштар донъяһы» темаһына** дәрес күрһәттем.

Дәрескә ҡарата **өс маҡсат** ҡуйылды: 1(белем биреү): "Ҡыш миҙгеле", "ҡоштар" темаһы буйынса алған белемдәрен тәрәнәйтеү һүҙлек запасын байытыу һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү; ҡылым темаһын ҡабатлау, юҡлыҡ формаһын үҙләштереү; 2 (тәрбиәүи): Ҡоштарға һаҡсыл ҡараш булдырыу; үҙ-ара итәғәтле аралашыу формаларын нығытыу, телгә иғтибарлылыҡ, ихтирам тәрбиәләү; 3(үҫтереүсе): фекерләү ҡеүәһен, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Маҡсаттан сығып түбәндәге **бурыстар** билдәләнде:

-уҡыусыларҙың белемдәрен дөйөмләштереү, тәрәнәйтеү;

-тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү;

-башҡорт теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләү;

-уҡыусыларҙа ыңғай тәҫораттар булдырыу;

-үҙ һәм иптәшеңдең эшен дөрөҫ баһаларға өйрәтеү.

**Уҡытыусының эш планы буйынса** бөгөнгө дәрестә улар «Ҡылым» темаһын иҫкә төшөрөп, ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһын аңлатыу. Билдәле булыуынса был тема башланғыс кластарҙа уҡ үтелә башлай. Грамматик теманы үҙләштереүҙә булышлыҡ иткән һәм дәрестең башынан аҙағына тиклем «ҡыҙыл таҫма» булып телмәр үҫтереү темаһы килә -ул «ҡоштар донъяһы». Был да уҡыусылар өсөн яңылыҡ түгел, ул 3-сө класта уҡ үтелә.

Дәрес бирелгән класта 16 уҡыусы, башҡорт телен 2-се кластан өйрәнәләр. Мин уларҙы икенсе тапҡыр ғына күрһәм дә, башҡорт теле буйынса уҡыу сифаты юғары ғына тип уйлайым. Уҡыусыларҙың белемдәре бар, башҡорт телен ҙур теләк менән өйрәнәләр. Бөгөн дә дәрестә «5», «4» билдәһен алған балалар күп булды.

**Дәрестең төрөн** мин ҡабатлау һәм грамматик теманы үҙләштереү дәресе тип билдәләйем.

Дәрестең төрөнән сығып түбәндәге **этаптар** билдәләнде:

I Ойоштороу мәле;
II Фонетик күнегеү менән өй эшен берләштерҙем;
III Телмәр үҫтереү “ҡоштар” темаһын ҡабатлау;
IV Өй эшен биреү;
V «ҡылымдарҙың юҡлыҡ формаһы» темаһын үҙләштереү;
VI Теманы нығытыу;
VII Дәресте йомғаҡлау;

**Дәрестең үҙенсәлеге** түбәндәгегә ҡайтып ҡала, һайланған метод һәм алымдар, компьютер менән эш дөрөҫ һәм урынлы ҡулланылды.

Дәрес отошлораҡ үтһен өсөн һәм ҡуйылған маҡсаттар үтәлһен өсөн мин түбәндәге **методтарҙы** ҡулландым: суггестив метод (реаль тормоштан алынған һүҙҙәрҙе дөрөҫ, урынлы ҡулланыу, АСО (карточкалар буйынса эшләү), проблемалы уҡытыу методы (проблемалы һорауға уҡыусыларҙан яуап эҙләтеү), репродуктив метод йәғни аңлап ҡабул итеү (уҡытыусы-уҡыусы формаһында аралашыу булды, таҡтаға сығып, таблица буйынса эшләү) ойошторолдо.

Күрһәтелгән дәрестә түбәндәге **технологияларҙың элементтары** ҡулланылды:

- сәләмәтлек технологияһы;
- коллективлыҡ технологияһы;
- компьютер технологияһы;
- уйын технологияһы.

Дәрес барышында индивидуаль һәм коллектив (парлап), фронталь **эш төрҙәре** үткәрелде.

Дидактик эш төрҙәре: уҡыусылар телдән дә (һорауҙарға яуап алыу,һығымта эшләү), яҙма ла (дәфтәрҙә, таҡтаға сығып) эшләнеләр.

Дәрестең маҡсаттары үтәлде, тип уйлайым.

Өйрәтеүсе маҡсат буйынса: әҙер карточкалар һәм рус теле менән сағыштырыу, дәфтәрҙәрҙә индивидуаль эшләү ярҙамында уҡыусылар ҡылымдың юҡлыҡ формаһын үҙләштерҙе.

Тәрбиәүи маҡсат буйынса: үҙ-ара итәғәтле аралашыу формалары булдырылды, ҡоштарға ҡарата һаҡсыл ҡараш, уларға ҡыш көндәрендә ярҙам итеү тойғоһон тәрбиәләү.

Үҫтереүсе маҡсат буйынса: уҡыусыларҙың уҡыу күнекмәләре һөйләмдәр уҡып, һорауҙарға яуап биреп формалашты, фекерләү ҡеүәһе, ҡағиҙәләр буйынса һығымтылар эшләп үҫтерелде.

Минеңсә, дәрес яҡшы үтте. Планлаштырылған һәр бер этап ҡаралды. Уҡыусыларға дәрес оҡшаны, беҙ уны таҡталағы ҡоштар аша белдек, тимәк дәрес юҡҡа үтмәгән.

(Үемдең сикһеҙ рәхмәтемде, Фәймә Мәлик ҡыҙына еткергем килә.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!